# Йәш хәбәрсе.



“Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле – минең телем”.
З.Биишева.

№ 3, 25 ноябрь 2015 йыл.

## 29 ноябрь- Әсәләр көнө.

Рәсәйҙә Әсәләр көнө 18-се тапҡыр үткәрелә. Ул 1998 йылдан башлап билдәләнә . Ноябрҙең һуңғы йәкшәмбеһе байрам итеп уҙғарыла.

Ә тотош донъяла был байрамдың тарихы үткән быуаттарға барып тоташа. 18 быуаттан алып 19 быуатҡа тиклем Бөйөк Британияла “Әсәйҙәр йәкшәмбеһе” тигән байрам билдәләнә. 1872 йылда Американың танылған пацифисткаһы Джулия Уорд бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәштә әсәйҙәрҙең берҙәмлек көнөн “Әсә көнө” итеү тәкдиме менән сығыш яһай. Әммә ул Америка ла ла, башҡа илдәрҙә лә хуплау тапмай.

1907 йылдан Американың Филадельфия штатынан Анна Джарвис үҙененең әсәһе иҫтәлегенә әсәйҙәрҙе тантаналы ҡотларға тәкдим итә. Дәүләт ойошмалары на, закондар сығарыу органдарына, күренекле кешеләргә йылдың бер көнөн әсәйҙәрҙе ҡотлауға арнарға тигән тәкдимде хуплауҙарына үтенеп хаттар яҙа. 1910 йылда Варджиния штаты тәүге булып Әсә көнөн рәсми байрам итеп таный. 1914 йылдан АҠШ Президенты Вудро Вильсон май айының икенсе йәкшәмбеһе бөтә Америка әсәйҙәрен ҡотлау өсөн милли байрам тип белдерә. Йәнә 23 ил был көндө байрам итә. Тағы 30 ил башҡа көндө билдәләй

# Әсәһен ҡәҙерләгән ҡәҙерле булыр.

...Әсәй, әсәй...
Ошо һаран йомарт һүҙҙәреңдә
Йылылығы күпме йөрәктең!
Һин бит мине оло юлға илттең,
Кеше булыу фәнен өйрәттең.
Р.Назаров.

Ер йөҙөндә иң матур һүҙ - әсәй. Ул һәр кеше өсөн беренсе һүҙ. Әсәй – иң изге, ҡәҙерле кеше донъяла. Баланы донъяға тыуҙырыусы ла, ҡарап үҫтереүсе лә, оло тормош юлына баҫтырыусы ла – Әсәй. Әсә ҡулдары – иң мәрхәмәтле һәм наҙлы ҡулдар, улар бөтәһен дә эшләй ала.

Әсә йөрәге – иң һиҙгер йөрәк; уларҙа мөхәббәт бер ҡасан да һүрелмәй, ул бер нәмәгә лә вайымһыҙ булмай. Кешегә нисә йәш булыуына ҡарамаҫтан, барыбер әсәй кәрәк. Әсәйҙәрҙе рәнйетмәйек, уларҙың ҡәҙерен белеп, хөрмәт итеп донъя йөҙөндә йәшәйек. Әсәйеңә мөхәббәтең ни тиклем ҙур булһа, тормошоң да шул тиклем шатлыҡлы һәм яҡты була.

- Бала саҡтан төн йоҡоларын ҡалдырып, һине кем ҡараған?
- Әсәй!

- Илағанда, ҡосағына алып, кем йыуатҡан?
- Әсәй!

- Ергә баҫып беренсе тапҡыр атлап килгәндә кем етәкләгән?
- Әсәй!



**Фәһемле һүҙҙәр.**

Әсәй – донъяла иң яҡын, иң ҡәҙерле кеше ул!

Әсә янында бала етем булмай.

Әсә йөрәге- иң тоғро һәм һиҙгер йөрәк.

Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала

.

# Ер һәм Йыһан улы – Рәшит Назаров.

Кешелек донъяһы башланғандан бирле донъяға күпме сәсәндәр, аҡындар, шағирҙар - һүҙ оҫталары тыуған! Милләттең аҡыл осошон, рухи бейеклеген билдәләгән улар. Тора-бара улар исеме халыҡтың ғорурлығы ғына булып ҡалмай, милли мәҙәниәттең символына әүерелгән, халыҡ күтәргән байраҡтың юғарылығын билдәләгән. Рустарҙа Пушкин, немецтарҙа Гете, итальяндарҙа Данте, татарҙарҙа Туҡай – ана шундай бөйөк ижадсыларҙың бары ҡайһы берҙәре.Телгә алмаған милләттәрҙә юҡмы ни улар!

Донъя күләменән күренер оло таланттар башҡорт улдары һәм ҡыҙҙары араһынан да булған, барҙар һәм буласаҡ!

Ана шундайҙарҙың береһе – Рәшит Назаров.Ул, беҙҙең баш особоҙҙа ғына түгел, бәлки, бөтә әҙәбиәт күгенән күренгән бығаса күренмәгән балҡыш, яңы яҡтылыҡ – йондоҙ булып тәгәрәп үтте.



Рәшит Назаров – Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылында 1944 йылдың ноябрь айында Фатима апай менән Сәйетбаттал ағайҙың бишенсе балалары булып донъяға килгән.

Бәләкәйҙән башҡа ауыл балалары кеүек ялан аяҡ йәйҙәрен үткәрә, ата-әсәһенең алыштырғыһыҙ ярҙамсыһы була.

Йәше еткәс, уҡырға бара, уны тамамлай, колхозда эшләй. Көнө-төнө лирик, ҡайһы ваҡыт сатирик шиғырҙар, нәҫерҙәр, хикәйәләр яҙа, поэмалар ижад итә.

1963-1966 йылдарҙа хәрби хеҙмәттә була. 1966 йылда, өсөнсө йыл хеҙмәт иткәндә, зәхмәтле психик ауырыуға дусар була. Ғүмеренең аҙағына тиклем махсус йорттарҙа йәшәй.

Йылдар, йылдар, мәрхәмәтһеҙ йылдар
Ер аҫтына мине аттылар.
Бығау һалып хискә, аҡылыма
Тар төрмәгә илтеп яптылар...

Р. Бикбаев әйткән һүҙҙәр иҫкә төшә: “ Салауат та, Рәшит Назаров та бер үк йәштә тиерлек тотҡонлоҡҡа дусар була: береһе каторгаға бикләнһә, икенсеһенең зиһенен ҡараңғылыҡ солғап ала. Әйтерһең дә, улар был донъяға таланттары менән кешеләрҙе хайран итергә лә, шунан һуң тиҙ арала, бәхетһеҙлеккә тарып, милләтте үкендерергә, хәсрәткә һалырға тыуған”.

Рәшит Назаров ижады, үҙе йәштән генә йән фажиғәһенә юлыҡһа ла, юлдарында “таш ҡатламдар ятһа ла”, һәр саҡ яҡты,өмөт, ышаныс менән һуғарылған ҡояшлы ижад.

# Назаров уҡыуҙары




**...Китһәң дә һин, арта ғына барыр**
**Нурҙарыңдың көсө көндән-көн**
**Ҡалырһың һин ерҙә халҡыбыҙҙың**
**Ғәзиз улы булып берҙән-бер.**
**Э.Хәмәтшин**

Йыл һайын районда яҡташыбыҙ, Ғәлимйән Ибраһимов, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Назаров шиғырҙарын яттан һөйләү конкурсы ойошторола. Бындай ярыштар шағирҙың үлемһеҙ ижадын өйрәнергә, ғәжәйеп әҫәрҙәре менән танышырға мөмкинлек бирә.

21 ноябрҙә Талбазы башҡорт гимназияһында " Назаров уҡыуҙары" үтте. Унда төрлө мәктәптәрҙән уҡыусылар йыйылғайны.



Ҡатнашыусылар ҙур әҙерлек менән килгәндәр. Бәйгелә лицей уҡыусылары ла һынатманы. Йәлилова Аделина 8Б. (Ғөмәрова А.Ә), Аҡсурина Әҙилә 2В (АбзалиловаЗ.Ғ.),Ҡотлобаева Айлина 8А (Шәйәхмәтова Г.М.) 2-се ,6-сы класс уҡыусылары Ғөмәрова Дилә һәм Рафиков Айрат (Әлимбәкова Л.Р.) 3-сө урынға сыҡты һәм Мәғариф бүлегенең Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнделәр. Йомағолова Азалия, Әхмәрова Эльвира, Ғиләҙетдинова Аделина , Ғиззатуллина Алһыу, Әхмәтйәнова Азалия, Мөхәмәтшина Эльвинаның сығыштары ҡунаҡтарҙың күңеленә хуш килде.

Бөйөк шағирыбыҙ иҫтәлегенә арналған сара беҙҙең күңелдәрҙә оҙаҡ һаҡланасаҡ.





ӘминеваРегина, 7 класс уҡыусыһы

# Шағир ижады үлемһеҙ.



17 ноябрҙә, Әҙәбиәт йылы планына ярашлы, шағир, Ғәлимйән Ибраһимов һәм Салауат Юлаев исемендәге премиялар лауреаты, беҙҙең яҡташыбыҙ Рәшит Назаровтың шиғырҙарын яттан һөйләү буйынса конкурс үткәрелде. Сара шағирҙың тормош юлын өйрәнеү, үлемһеҙ ижадын йәш быуынға еткереү, уҡыусыларҙа ижад ҡомарын үҫтереү, әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу маҡсатында үткәрелде. Шиғырҙар башҡорт, татар, рус, сыуаш, инглиз телдәрендә яңғыраны.

Конкурсты китапханасы Мораҙымова Наилә Хөрмәт ҡыҙы әҙерләне һәм алып барҙы. Жюри ағзалары директор урынбаҫары Чанышева Лилиә Рәмил ҡыҙы, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зәйнәғетдинова Әлфиә Рәшит ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ғөмәрова Айһылыу Әхәт ҡыҙы,татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Шәйәхмәтова Гөлсәсәк Мәһәҙи ҡыҙы, инглиз теле уҡытыусыһы Бикмаева Минзәлә Рәшит ҡыҙы ҡатнашыусыларҙың сығыштарын юғары баһаланы.

Ярышта 2-11 класс уҡыусылары көс һынаштылар. 2А класы уҡыусылары Тарасов Николай, Ғөмәров Рафаэль, Әхтәмова Камилла, Мөләкова Эльвина (Юлдашева Р.Р.), Шәмсунова Эмилия 2Г ( Вәлиәхмәтова Р.Р.), Булатова Вилена, Аҡсурина Әҙелә, Батыршина Аделина, Насырова Лилиә 2В (Абзалилова З.Г.), Хәсәнова Элина, Петрова Анастасия, Божко Аделина 3А ( Фәхретдинова Р.Ф.), Йәғәфәрова Руфина, Юнысова Арина 5В (Симашева Г.Х.), Ҡотлобаева Айлина 8Б, Мөхәмәтшина Эльвина 9В (Шәйәхмәтова Г.М.), Ноғоманова Ильнара, Ғөмәрова Дилә 6Б ( Әлимбәкова Л.Р.), Федорова Вероника 9В (Федорова Ю.Д.), Әхмәтйәнова Азалия 7А, Байғолова Эльмира 7Б, Ғәйнуллина Ильвина 9Б (Булатова Г.М.), Ғиләҙетдинова Аделина 9А, Ғиззатуллина Алһыу 9А( Исламғолова Р.У), Йәлилова Аделина, Йомағолова Азалия 8Б, Өмөтбаева Эльнара, Кәримова Роза 5Б (Ғөмәрова А.Ә.), Әхмәрова Эльвира 10В, ( Әхмәрова Ә.И.), Евстафьева Яна 5Б, Демчук Кристина, Хәсәнова Әлиә, Йәғәфәрова Азалия, Павлов Кирилл 6А (Зәйнәғетдинова Ә.Р.) Маҡтау грамоталары һәм иҫтәлекле бүләктәр менән бүләкләнде.

Сара бик ҡыҙыҡлы һәм бай йөкмәткеле булды.







Әхмәтйәнова Азалия
7 класс уҡыусыһы